■ Шиғри тулҡында

Зөлфиә ХАННАНОВА

## Эй, башҡортом, кей түбәтәй!

*Эй, башҡортом, әйт аҙан!*
*Ата-бабалар йолаһын*
*Тергеҙәйек ҡайтанан!*
*Эй, башҡортом, йәй намаҙлыҡ!*
*Теләк телә сәждәлә.*
*ил-йортобоҙ тыныс булыр,*
*Урап үтер мең бәлә.*
*Эй, башҡортом,*
*тарт тәсбихең!*
*Әйт һин: "Аллаһу әкбәр!"*
*Киң ҡөҙрәте менән Хоҙай*
*Бар халҡымды бүләкләр.*
*Эй, башҡортом, сал ҡорбан!*
*Йөрәгеңдә иман артһын,*
*Күңелеңдә - миһырбан.*
*Эй, башҡортом, ҡалдыр*
*ил, тип,*
*Доға ҡылырлыҡ бала.*
*Ошо изге еребеҙгә*
*Хужа булырлыҡ бала.*

*Лә илләһә, иллалаһу*
*Лә илләһә, иллалаһу*
*Лә илләһә, иллалаһу*
*Мөхәммәде рәсулуллаһ!*

■ Инсан

# ИСЕМ ҠУШЫУ - БАЛАҒА ФАТИХА БИРЕҮ

Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА

Мәктәптә уҡыған йылдарҙа әле, юл төшөп, бер таныштарыма инергә тура килгәйне. Оло йәштәге хужабикә "имелде лә, имелде", тип йыш ҡабатлаған, һүҙ имсәк имгән сабый тураһындалыр, тип ҡуйҙым. Әйткәндәй, башҡаланан өлкән ҡыҙы, ике йәштәр тирәһендәге малайы менән ҡайтҡан ине. Шул бала имеҙлек юғалтҡандыр, тип уйлайым. Имеҙлек бирмәнеләр, шулай ҙа өләсәй һаман: "Имел дә, имел".

Аптырай төштөм, бөтөнләй икенсе нимәне аңлата түгелме был һүҙ? Ә ейәндең исеме Эмиль булып сыҡты. Өләсәй дөрөҫ өндәшкән: башҡорт тел ҡануны буйынса, әлбиттә, Эмиль "имел" булып яңғырарға тейеш. Бындай ят атаманы беренсе тапҡыр ишеткәнгә күрә, халҡыбыҙҙың теленә, ҡолағына ятмаған исемде ни өсөн ҡуштылар икән, тип аптырағайным.

Шуғалыр нык иҫтә уйылып ҡалды был хәл. Йәнә лә, атаәсәнең яңылышлығы һымаҡ ҡабул иткәнем өсөн, әлеге исем милләтебеҙҙә бөтөн ишетелмәҫ тип уйлағайным. Бәхетһәң, бер ҙә улай түгел икән. Йылдар үтте. Хәҙер халҡыбыҙ араһында Эмилдәрҙең артыуын күрәм.

Әлбиттә, унан ғына француздың йәки немецтың беҙгә ҡарата ихтирамы артып китҡәндер тип уйламайым мин. Заманында "интернациональ исем" тигән һүҙ бәйләнеште лә уйлап сығарғандар ине бит. Әммә ундайҙарға бер мулла карттың һүҙҙәре менән яуап бирер ине: "Етмеш йыл буйы Союзда "интернационализм, интернационализм" тип һөйләһәләр ҙә, урыҫтар үҙҙәре бер ҙә сабыйҙарына Әхмәтғәли, Әхмәтвәли тип тә исем ҡушманылар бит әле, һеңлем". Шулай ҙа исемдәр аша ҡайһы бер халыҡтарҙың тарихын күҙалларға була икән. Ким, Мэлс һымағыраҡ исемдәр беҙҙең айырым дәүергә бәйән итмәйме ни? Хатта былай ғына түгел: исемгә булған мөнәсәбәт милләт аңының, рухының, психологияһының үҙгәрешен сағылдыра. Йылдар үтер, бөгөнгө сабыйҙар Эдик, Эльнар атлы бабайҙар булып йөрәйәсәктәр әле. Исем ҡушыу мәҙәниәтлелеге тураһында "Киске Өфө"лә лә йыш ҡына яҙалар. Ләкин ҡатнаш ауылдар, ҡасабаларҙа йәшәүсе милләттәштәребеҙ был баҫманы алдырмай, улар "ҡатнашлыҡ"ҡанундарына буйһоноп көн күреүен дауам итә. Исем ҡуша белеү йолаһы, уға бәйле мәсьәләләр ҡүтәрелгәнен белмәүҙәре лә ихтимал. Нимәне үҙ эсенә ала һуң был ҡанун - икенсе милләтте абруй итеп күреү, уға яраҡлашыу, улар һымағыраҡ булырға тырышыу, йәғни көсһеҙләктең һәм кәмһенеүҙең үҙенсәлекле көҙгөһө.

Европала бер нисә илдә "һәйбәт яңғырашлы түгел, ят исем" тип ҡайһы бер исемдәрҙе ҡуштырмайҙар. Эйе, законлары бар был турала. Дөрөҫ эшләйҙәр, исем ҡушыу - үҙенә күрә идеология һәм сәйәсәт. Беҙҙә лә ата-әсәләр, өләсәйолатай, кәрсәй-картатайҙар ошо яуаплылыкты тойһондар, мәсьәләнең етдилегенә аңлап ҡараһындар ине лә бит. Нимә генә тимәһендәр ҡай берәүҙәр, беҙҙе барыбер милли исемдәр аша ныҡыраҡ хөрмәт итәләр һәм ныҡыраҡ танышйҙар.

Тышҡы яңғырауыҡлылыҡ менән самаһыҙ мауығыу, эске йөкмәткенең, рух донъяһының һайыға барыуына, имандың бөҫкәрененә ишара. Ибн Ғүмәр тапшырыуынса, Рәсүлебеҙ (с.ғ.с.) шулай тигән: "Кем ниндәй халыҡҡа оҡшарға тырыша, шул халыҡ менән ҡуша ҡубарыласаҡ". Тимәк, өммәткә хас исем ҡушыу - Аллаһы Тәғәлә алдындағы бурысыбыҙҙы ла үтәү.

Ундырышлы ер һәр кемде ҡыуандыра. Бәрәкәте, эстә йәшерелгән ҡеүәте китһә, ер яланғаслана.

Исемдәр, ниндәйҙер кимәлдә, милләттең эске ҡеүәтен тоҫмалларға ярҙам итә, тимәк, уның киләсәген күҙалларға. Ул баланың төпкә аңына, яҙмышына ла тәьҫир итә. Ҡасандыр Олеся, Оксана тип ҡушылған ҡыҙҙарыбыҙҙың күпселеге Иван һәм Степандарын тапты. Был урында тағы ла нимәлер өҫтәп әйтеү урынһыҙ.

Әйткәндәй, аҙаҡҡы йылдарҙа милләтең, өммәттең ҡотон артырып, Фатималар һәм Рамаҙандар күп кенә тыуҙы. Ошондай мәғәнәле исем аша ата-әсә балаһына матур, иманлы яҙмыш васыят итте. Халҡының ҡотон бәрәкәтен арттырыуҙа был ҙур бүләк түгелме ни? Һәр хәлдә, миңә шулай тойола.

■ Балаларға уҡығыҙ

# ИСЛАМ МӘҘӘНИӘТЕ НИГЕҘҘӘРЕ

Мәрйәм БУРАҠАЕВА яҙмаларынан

Мөхәммәт пәйғәмбәр йәшәгән осорҙа Ғәрәбстанда тарҡаулыҡ әҙәпһеҙлек көслө була. Был хәл буласаҡ пәйғәмбәрҙе тәрән уйға һала. Уға Ябраил килә. Ябраил - изге фәрештә, ул саф күңелле кешегә генә килә. Ябраил Мөхәммәттән алда йәшәгән Муса пәйғәмбәргә лә килгән.

Мөхәммәт пәйғәмбәр - исламға нигеҙ һалыусы. Тик ғәрәптәр тәүҙә Мөхәммәттең тәғлимәтен аңламайҙар. Шулай итеп, илаһтарға табыныусылар - ҡөрәйштәр тип, ә ислам динен ҡабал итеүселәр мосолман тип атала башлай. Мосолмандар бер генә Аллаға ышана. Ошо урында мәжүсилек менән ислам диненең айырмаһын ныҡлап аңлатып китеү яҡшы булыр. "Бисми-лләһирәхмәни-ррәхим" тигәндең тәржемәһе: "Рәхмтле һәм рәхимле Аллаһ исеме менән". Мосолмандар ниндәй генә эшкә тотонһп ла, юлға сыҡһа ла бисмиллаһыҙ сыҡмай. Тәбиғәтте бысратыу, урмандандарҙы сүпләү, йылға-күлдәргә шешәләр ырғытыу, йылғаға төшөп машиналар йыуыу - ошондай етешһеҙлек, тәртипһеҙлек ҡайҙан килеп сыға? Беҙ бит барыбыҙ ҙа мәктәптә уҡыйбыҙ, белем алабыҙ, фәҡәт яҡшы булырға ғына өйрәнәбеҙ, беҙҙең киләсәгебеҙҙе кем хәстәрләр - үҙебеҙ түгелме?.

**Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре**

Әлбиттә, бөтөн халыҡтар ҙа бер төрлө генә уйламаған, бер юлы ғына дингә килмәгән. Шуның өсөн дә донъяла төрлө дини йүнәлештәр барлыҡҡа килгән. Хатта бер үк илдә, мәҫәлән, беҙҙең илебеҙҙә мәжүсирҙәр тип аталған бер үк дини йүнәлештәге халыҡтарҙың, әйтәйек, башҡорттарҙың, мариҙарҙың, мордваларҙың, удмурттарҙың, сыуаштарҙың да күҙаллауҙары төрлө булған. Мариҙар иң юғары алла тип ҡояш менән яҡтылыҡты атаһа, мордваларҙа аллалар һаны етмеш етегә еткән. Удмурттарҙа - ҡырҡтан ашыу, сыуаштарҙа ла улар байтаҡ. Башҡорттарҙа ун ике эйә һәм ун өсөнсөһө - Тәңре һаналған. Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең тәғлимәте Алланың берлеген раҫлауҙан ғибәрәт. Уҡыусылар пәйғәмбәр исемдәренең бөтөн диндәр өсөн дә уртаҡ булыуын, тик исламда уларҙың тәржемә ителеүен белергә тейеш: Адам-Әҙәм, Авраам - Ибраһим, Моисей - Муса, Иисус - Ғайса. Иисус-Ғайсаның әсәһе - Мария-Мәрйәм. Йәһүдтәрҙең Нәҫер ителгән иле, Йәрүсәлим ҡалаһындағы ғибәҙәтханаһы хаҡында һөйләгәндә, ни өсөн әлеге көнгәсә был ерҙәрҙә туктауһыҙ һуғыш барыуын уҡыусылар аңлар. Палестина халҡы менән туктауһыҙ бәрелештәр барған Газа секторы (баш ҡалаһы Газа) йәһүдтәрҙең боронғо Нәҫер ителгән ерендә урынлашҡан. Ә был сектор хәҙерге көндә Палестинаға ҡарай.

**Донъяуи этика нигеҙҙәре**

"Урал батыр" эпосында төп фекер Яҡшы кеше булып йәшәү, үҙеңдән һуң яҡшы исем ҡалдырыу тураһында бара. Ә кем, ниндәй ул Яҡшы кеше? Ил - халҡын хәстәрлеген, дошман ябырылһа - илен ҡурсалаған, халыҡ мохтажлыҡ кисергән һәмәне (эпоста һыу) үҙ ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып булһа ла тапҡан, етем-еҫерҙе баҡҡан, ололарҙы ололай, кеселәрҙе ҡурсалай белгән кеше ул Яҡшы кеше. Мәктәптәрҙә, ғаиләлә, йәмғиәттә, өйҙә алып барылған тәрбиә эштәре ошо маҡсатҡа йүнәлтелгән. Уға нисек, ниндәй юлдар менән өлгәшергә мөмкин? Нимә яҡшы, нимә насар был донъяла? Кешелә ниндәй сифаттар маҡтала, ниндәйҙәре ғәйепләнә? Әхлаҡ үҙенсәлектәре, әхлаҡ нормалары ошондай һорауҙарға яуаптарҙан тора ла инде. Кеше әҙәпле, тәрбиәле булып тыумай. Ул ғүмер буйы тәрбиәләнә. Әммә ҡайһы бер кешеләр тыштан ғына ялтырап, эстән ҡалтырап йәшәй. Дини тәрбиә бындай кешеләрҙең үҙ язаһын аласағын аңғарта. Яҡшылыҡҡа - яҡшылыҡ, яуызлыҡҡа - яуызлыҡ ҡайта, "Теге" донъяла ожмах һәм тамуҡ бар, тигән фекер яҙ дини тәғлимәттә. Ә дини булмаған тәғлимәттә - донъяуи әхлаҡ нормаларында - кеше иң элек үҙ намыҫы алдында таҙа саф булырға тейеш, тигән һабаҡ бирелә. Ошо уҡ фекер мең йылдар элек ижад ителгән "Урал батыр" эпосында былай тип әйтелгән:

*Утта ла янмаҫ яҡшылыҡ,*
*һыуҙа ла батмаҫ яҡшылыҡ,*
*Телдән дә төшмәҫ яҡшылыҡ.*

■ Иман

# ХӘЙЕР БИРЕҮ, САҘАҠА

Хәләл аҡсанды арттырып, кемгәләр ярҙам итеүҙең сауаплы икәнлегенә бер кем дә шикләнмәй. Тик шуны онотмаһаҡ ине: хәйер мохтаждарға бирелергә тейеш. Беҙҙә уны оло йәштәге кешегә биреү киң таралған, ҡарттарҙың был аҡсаға мохтажлыҡ кисерәме-юкмы икәнлеген уйлап та тормайбыҙ. Ә ысынында, әбей-бабайҙар өсөн иң һәйбәт хәйер - уларға йортҡураларында ярҙам итеү, вакытындағы йәлләмәй генә һөйләшеп ултырыу, үҙең бешергән аҙыҡ менән һыйлау һәм башҡалар. Магазинға йөрөй алмаған ҡарт хәйер аҡсаһын нимә эшләтһен? Әлбиттә, аҡсаға мохтаж ҡарттар ҙа бар, әммә кешегә ҡарт булғаны өсөн генә хәйер биреүҙең бер мәғәнәһе лә юҡ. Шуға ла изгелек эшләргә теләйһегеҙ икән, ярҙам ҡулын мохтаждарға һуҙығыҙ! Кемдер бер мең һум аҡсаға мохтажлыҡ кисерһә, кемдер бер тапҡыр шылтыратып хәл белешеүҙән, ауырып ятканда бер йотом һыу эсереүҙән генә рәхмәтле буласаҡ.

Ҡайсаҡ кеше башҡалар ҙа күрһен, уға эйәрһен өсөн саҙаҡаны мохтаждарға күрһәтеп бирә. Әгәр уның ниәте башҡаларҙың йөрәгендә изгелек уятыу ғына икән, һәйбәт.

Хоҙай Тәғәлә: "Хәйерҙе асыҡтанасыҡ бирәһегеҙ икән - һәйбәт, әгәр ҙә уны ярлыларға башҡаларға күрһәтмәй генә бирһәгеҙ - тағы ла яҡшыраҡ..." ("Һыйыр" сүрәһе, 271), - тип әйткән. Ошо һүҙҙәрҙән күренеүенсә, ҙур сауап алырға теләгәндәр хәйерҙе күрһәтмәй генә бирергә тейеш. Ундай хәйерҙең асыҡтан-асыҡ бирелгәненән етмеш тапҡырға һәйбәтерәк икәнлеген күрһәткән хәҙис бар. Шуға ла бөтәбеҙ ла беләйек: хәйер Аллаһы Тәғәлә өсөн бирелә, кемдер һине йомарт тип маҡтаһын өсөн түгел.

Тағы ла шуныһы - кемгәләр хәйер биргәнһегеҙ икән, ул кешенең саҙаҡаны нисек, ҡасан, нимә өсөн тотоноуын тикшереп йөрөмәгеҙ. Миҙалдың икенсе яғы ла бар: мосолмандар диндәштәренә ярҙам итергә тейеш, хәйер мосолмандарға бирелә. Тимәк, хәйерҙең хәрәмгә тотонолмаясағына ышаныс бар. Етем балаларҙы ла онотмағыҙ. тик был урында тағы ла хәйерҙең аҡса ғына түгел, ниндәйҙер башҡа төр ярҙам да була алыуын иҫегеҙгә төшөргә килә.

Хәрәм юл менән табылған байлыҡтан бирелгән саҙаҡаны Хоҙай Тәғәлә ҡабул итмәйәсәк. Уның быға мохтажлығы юҡ. Әммә хәрәм юл менән эшләнгән аҡсаны тулыһынса кемгәләр ярҙам итеп күсерәһегеҙ икән, һәйбәт буласаҡ. Сауабы булмаһа ла, гонаһығыҙ юйыласаҡ.

Хәйер итеп биреү өсөн әйберҙең сифатлыһын һайлайҙар. Үҙең яратҡан нәмәне хәйер итеп бирә белеү иманлы булыуҙы күрһәтә. Ҡыҫҡаһы, хәйер "исем өсөн" түгел, ярҙам өсөн булырға тейеш.

Бөтә нәмә лә Хоҙай Тәғәләнең ҡушыуы, теләге буйынса башҡарыла. Кемгәләр - байлыҡ, кемгәләр - талант, кемгәләр сир бирелә. Ләкин быларҙың бөтәһе лә һынау өсөн генә, мәңгелек түгел. Шуға ла ҡаҙанған байлыҡты Аллаһы Тәғәлә өсөн дөрөҫ ҡулланыуҙан да һәйбәтерәк юл юҡ. Хәйер бирергә лә, мохтаж булһағыҙ, алырға ла тартынмағыҙ!